КОНТРОЛЬНЫЙ ЭКЗЕМПЛЯР

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ХЕҘМӘТ БАЙРАҒЫ

Газета 1931 йылдың 1 ноябренән сыға

Башҡорт АССР-ы, КПСС-тың Хәйбулла район комитеты һәм халыҡ депутаттарының район Советы органы

№ 12 (5671) Кесаҙна, 27 ғинуар, 1983 йыл. Хаҡы 2 тин.

Спорт—сәләмәтлек сығанағы

Коммунистар партияһы һәм Совет дәүләте физик культура һәм спортты үҫтереүгә даими рәүештә ҙур иғтибар бирә һәм уны хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү, уларҙың сәләмәтлеген нығытыу һәм үҫеп килгән быуынды юғары етештереүсәнле хеҙмәткә һәм Тыуған илде һаҡлауға әҙерләүҙең мөһим средстволарының береһе итеп ҡарай.

КПСС Үҙәк Комитетының һәм СССР Министрҙар Советының «Физик культура һәм спорттың массовыйлылығын артабан күтәреү тураһында»ғы ҡарары (1982 йыл) быны асыҡ раҫлай.

Тәжрибә һәм практика күрһәтеүенсә, физкультура һәм спорт менән даими шөғөлләнеү хеҙмәт коллективтарының производство күрһәткестәренә ыңғай йоғонто яһай, эш ваҡытын юғалтыуҙы кәметеүгә, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуға һәм кадрҙарҙың йыш алмашыныуын әҙәйтеүгә булышлыҡ итә.

Беҙҙең районда 45 физкультура коллективы бар. Былтыр 3,6 мең ГТО значкисы, 3,2 мең разрядлы спортсы әҙерләнде, спорт секцияларында 6 мең кеше шөғөлләнә, йәмәғәт башланғысында 543 инструктор-тренер, 300 судья эшләй. Спорттың футбол, волейбол, баскетбол, еңел атлетика, милли көрәш, саңғы ярышы, атыу, шайбалы хоккей кеүек төрҙәре киң таралған.

Райондың йыйылма командалары зона һәм республика ярыштарында даими ҡатнаша. Футболсыларыбыҙҙың йыйылма командаһы Белорет ҡалаһында беренсе урынды, еңел атлеттар—өсөнсө, ГТО-ның йәйге күп төрөнән алышыусылар өсөнсө урынды яуланы.

Шул уҡ ваҡытта районда физкультура һәм спорттың торошон массовыйлылыҡ һәм спортсыларыбыҙҙың ҡаҙаныштары кимәле менән сағыштырып ҡарағанда ҡәнәғәтләнерлек тип әйтергә ярамай. Йәштәрҙең физик әҙерлеге бөгөнгө көн талаптарына тулыһынса яуап биреп еткермәй әле.

Массовый спорт эштәре Калинин исемендәге, Салауат исемендәге, «Һаҡмар», «Новый путь» колхоздарында, Аҡъяр совхозында, Бүребай руда идаралығында һәм Хәйбулла геологоразведка партияһында айырыуса насар ҡуйылған.

Һәр колхозда һәм совхозда физкультура һәм спорт буйынса методист булырға тейеш. Ләкин ҡайһы бер хужалыҡтарҙың етәкселәре спортты үҫтереүгә һалҡын ҡарай, район ярыштарында ҡатнашыу өсөн спортсыларға транспорт бүлеп бирмәй һәм уларҙы эштән ебәрмәй.

1-се һәм 2-се Аҡъяр, Мәмбәт, Маҡан урта, Степной, Атинген һәм Федоровка һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрендә кластан тыш массовый спорт эштәре һәйбәт ҡуйылған. Бында мәктәп балалар һәм үҫмерҙәр өсөн культура һәм спорт тормошо үҙәге булып һанала. Ошо мәктәптәрҙең уҡыусылары райондың спорт сараларында актив ҡатнаша һәм спорттың күп кенә төрҙәре буйынса призлы урындарҙы ала. Әммә Татыр-Үҙәк Самар, Йәнтеш урта, Солтанғужа, Бакаловка, Иҫәнгилде, Иләс һигеҙ йыллыҡ мәктәптәренең етәкселәре һәм физкультура уҡытыусылары хаҡында быны әйтерлек түгел.

Балалар—беҙҙең киләсәгебеҙ. Улар йәйге осорҙа айырым хәстәрлек менән солғап алына. «Аҡсарлаҡ», «Березка» пионер лагерҙары асыла, күп кенә мәктәптәрҙә балалар майҙансыҡтары ойошторола, унда йөҙҙәрсә балалар ял итә һәм шул уҡ ваҡытта үҙҙәренең һаулыҡтарын нығыта. Өлкән класс уҡыусылары ла иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Улар йәйге көндәрен мәктәптәрҙең хеҙмәт һәм ял лагерҙарында үткәрә. Улар өсөн «Күн туп», «Алтын шайба» (ҡышҡы сезонда) клубы призына ярыштар, «Пионерская правда» газетаһы призына «Өмөт старттары» ойошторола.

Спортсыларҙы тәрбиәләүҙә һәм әҙерләүҙә физкультура кадрҙары—физкультура инструкторҙары, тренерҙары һәм уҡытыусылары ҙур роль уйнай. Икенсе Аҡъяр урта мәктәбенән физкультура уҡытыусыһы Д. К. Йәрмөхәмәтов, Бүребай урта мәктәбенән М. М. Сәйфуллин, Степной мәктәбенән А. М. Щипакин һәм 1-се Аҡъяр мәктәбенән Г. Ф. Светлаковтар ошо эштең мөһимлеген белеп, үҙ бурыстарын яҡшы аңлап эшләйҙәр.

Физкультура һәм спорт —һаулыҡ һәм күтәренке кәйеф ул. Быны һәр кем иҫтә тоторға тейеш.

Аҡъяр совхозы Үҙәк бүлексәһенең 2-се һауым гурты мал ҡараусылары Геннадий Семенов менән Владимир Антонов малдарҙы уңышлы ҡышлатып сығарыуҙы һәм юғары һауым алыуҙы үҙҙәренең төп бурысы тип һанай. Геннадий Андреевич 1970 йылдан, ә Владимир икенсе йыл эшләй, уларҙың хеҙмәте тураһында совхоз етәкселәренән тик маҡтау һүҙҙәре генә ишетергә мөмкин.

ҺҮРӘТТӘ (һулдан уңға): В. Антонов һәм Г. Семенов.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Күп тупланһаҡ ҡарҙы— мул алырһың игенде

Ҡыҙыл байраҡлы Таналыҡ совхозы етәкселәре ун беренсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылында ла Аҙыҡ-түлек программаһын хәл итеүгә лайыҡлы өлөш индереү өсөн ынтыла. Баҫыуҙа ҡар күп тупланһа, уңыштың мул булырын улар яҡшы аңлай. Баҫыу өҫтөнә ҡар ятыу менән уҡ 10 агрегат эшкә төштө. 3 мең гектарҙан ашыу майҙанда ҡар тотолдо.

Был эш Таштуғай бүлексәһендә һәйбәт бара. Унда 1982 йылда районда ауыл хужалығы производствоһын иң яҡшы ойоштороусы тип табылған управляющий Р. Д. Собханғолов эште яҡшы ойоштороп ебәргән. Былтыр таштуғайҙар һәр гектарҙан 17-шәр центнер иген алды, ә быйыл уңышты кәмендә 20 центнерға еткерергә уйлай. Бының өсөн бөтә баҫыуҙарҙың 60 проценттан күберәгендә ҡар тотолған, баҫыуҙарға органик ашлама сығарыла, минераль ашлама ташыла.

Ә бына Әҙел һәм Савельевка бүлексәләренең управляющийҙары С. С. Карасов менән В. П. Драгунов агротехник сараларҙы үҙ ваҡытында үткәреүҙең мөһимлеген һаман аңлап еткермәйҙәр. Былтыр ошо бүлексәләрҙең баҫыуҙарында уңыш түгәнсә һәм түбән булды. Улар быйыл да ҡар тотоу, минераль ашлама туплау, баҫыуҙарға органик ашлама ташыу буйынса эште ысынтылап ойошторманғандар. Был эш Үҙәк бүлексәлә (управляющийы И. В. Дробот) әлегә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Ошо тәңкиттән һуң был бүлексәләрҙә ҡышҡы агротехник сараларҙы ойоштороу буйынса эштәр алға китер, тип уйларға кәрәк.

И. НОРЕЦ,

Таналыҡ совхозының баш агрономы.

* * *

«Красный доброволец» колхозы баҫыуҙарында ҡар тотоуҙа хәҙер алты трактор агрегаты эшләй. Был эш Әбүбәкир бригадаһында яҡшы ойошторолған. Механизатор Гәрәй Билалов смена нормаһын көн һайын арттырып үтәй.

Тотош колхоз буйынса 1200 гектар, шул иҫәптән Әбүбәкир бригадаһында 900 гектар, майҙанда ҡар тотолған.

Н. РЫБАКОВА,

«Красный доброволец» колхозы диспетчеры.

Калинин исемендәге колхоз. Механизаторҙар баҫыуҙарҙа мөмкин тиклем күберәк ҡар туплап ҡалырға тырыша. Баҫыуҙарҙа ҡар ни тиклем күп булһа, уңыш та шул тиклем мул буласағын улар яҡшы аңлай. Ҡар тотоусылар бер аҙнаға яҡын эшләйҙәр. Ошо ваҡыт эсендә 800 гектар майҙанда аҡ бураҙналар һалынды, ул планға ҡарата 20 процент тәшкил итә. Ҡар тотоу эше тағы ла көсәйтеләсәк.

Х. ДӘҮЛӘТБИРҘИН,

Калинин исемендәге колхоздың партбюро секретары.

ХАЛЫҠ КОНТРОЛЕРҘАРЫ ҺӘМ «ХЕҘМӘТ БАЙРАҒЫ» ГАЗЕТАҺЫ РЕЙДЫ

ТӘРТИП БУЛДЫРЫРҒА КӘРӘК

Яңы йылдың тәүге айы тамамлана. Ҡыш— алда торған баҫыу эштәренә техника әҙерләүҙең иң ҡыҙыу осоро, шуға күрә рейд бригадаһы ағзалары «Госкомсельхозтехника»ның район берекмәһендә техника ремонтлауҙың барышы менән танышырға ҡарар итте.

План буйынса беренсе кварталда 50, шул иҫәптән ғинуарҙа 10 трактор ремонтланырға тейеш. Ә был көндө гусеницалы 6 һәм тәгәрмәсле 5 трактор ремонтта тора ине.

Бына Фрунзе исемендәге колхоздың ДТ-75М тракторы. Уны механизаторҙар Р. Нураев менән Ғ. Мәмбәтов 1982 йылдың 28 декабрендә үк килтергән булған. Капиталь ремонтҡа план буйынса 24 эш көнө бүленә. Двигателе төҙәтелгән, хәҙер йөрөү өлөшөн йыйырға кәрәк, әммә запас частар юҡ. Уларҙың ҡасан булырын механизаторҙар аныҡ ҡына белмәй, шуға күрә улар үҙҙәренең ваҡытын бушты бушҡа бушатып үткәрә.

Ремонтты ойоштороуҙа берҙәм етәкселек игеү һиҙелмәй, тип һөйләй «Красное знамя» колхозы механизаторы И. Фәйзуллин.—«Беларусь» тракторын ремонтлайым. Уҙған аҙнала көн ярым ғына эшләнем, ике көн буйы запчасть артынан йөрөнөм. Ҡалған көндәр мәғәнәһеҙгә үтеп китте. Муфта өсөн үҙәк вал юҡ, «Сельхозтехника»ла уны табыуы ҡыйын. Дөрөҫ, бында уларҙы реконструкциялайҙар, ләкин ремонт сифаты шик тыуҙыра, бигерәк тә реконструкцияланған валдар беҙҙең таулы шарттарҙа эшләгән тракторҙарға ярап етмәй.

«Сельхозтехника»ла ремонтта ятҡан механизаторҙарҙың ялыуҙары башлыса шунан хасил: уларҙың хеҙмәте түбән кимәлдә ойошторолған, етештереүсәнле эшләү өсөн шарттар юҡ. Бигерәк тә тракторҙар ремонтланған цехта урын егешмәй. Сателлит, тормоз таҫмалары, муфта деталдәре, форсунка һиптергестәре, балансир втулкалары, дүңгәләктәр, ҡайһы бер подщипниктар һәм башҡа шуның кеүек запас частар юҡ. «Сельхозтехника»ла тәгәрмәсле тракторҙарҙың яғыулыҡ насостарын ремонтлау өсөн ярты йыл инде плунжер парҙары табып булмай. Сауҙа бүлеге өҙөклөк менән эшләй, заказдар ваҡытында үтәлмәй.

Икенсе яҡтан, эшсе ҡулдар етешмәй. Комбайндар ремонтлау өсөн ашығыс рәүештә токарҙар, мотористар, баҡыр цехына слесарҙар кәрәк. Ғинуар тамамланып килә, ләкин «Сельхозтехника» етәкселеге лә, ремонтҡа техника ебәреүсе хужалыҡтар ҙа килеп тыуған хәлдәр тураһында ысынтылап ҡайғыртмайҙар.

Ә бит тынысланырға урын юҡ. Үрҙә әйтелгән сәбәптәр һәм производство буталсыҡтары арҡаһында эшселәр һәм механизаторҙар араһында хеҙмәт дисциплинаһы түбән. Мәҫәлән, слесарь Ф. Ураҡов эскелек менән йыш шөғөлләнә. Дүшәмбе көндө механизаторҙарҙың 50 проценты эш урынында булмай, йома көндө улар ауылдарына бик иртә ҡайтып китә. «Новый путь» колхозы механизаторҙары А. Баракатов, В. Сидоров ремонтҡа үткән йылдың 17 декабрендә килгән. Ғинуарҙың тәүге яртыһында улар барлы-юҡлы ике көн генә эшләгән. Ошо осорҙа «Красный доброволец» колхозы механизаторы Е. Тарасов көн ярым ғына эш менән мәшғүл булған. Ә ҡалған көндәрҙә нәмә менән шөғөлләнгәндер? Әлбиттә, эскелек менән. Рейд үткәрелгән дүшәмбе көндө механизаторҙарҙың күпселеге «баш төҙәтеп» өлгөргән ине. Улар башлыса «Красный доброволец», «Новый путь», «Красное знамя», «Һаҡмар» колхоздары механизаторҙары.

Ошондай эскеселәргә, хеҙмәт дисциплинаһын тарҡатыусыларға ҡаршы нindәй көрәш алып барыла һуң? Мастерской мөдире Ф. Ҡаҙаҡбаев, ошо мөһим эштә үҙ-ара килешеп һәм берҙәм ынтылыш менән эшләмәгәс, беҙҙең тырышлыҡ һәм контроль йыш ҡына юҡҡа сыға, тип һөйләй.

Ысынлап та, һәр яҡ хеҙмәттең насар ойошторолоу сәбәбен бер-береһенә ауҙарырға әҙер тора: механизаторҙар—етәкселәрҙе, ә улары, үҙ сиратында, ремонтсыларҙы ғәйепләй.

Техника ремонтлауҙағы ошондай хәл йыл һайын тиерлек ҡабатлана. Айырым кешеләрҙең яуапһыҙлылығы, эш ваҡытына хужаларса ҡараштың һәм талапсанлыҡтың булмауы ремонт эштәренә аяҡ сала. Ремонтсы-механизаторҙар араһында йәштәрҙә байтаҡ, улар кистәрен, ваҡыт үткәрергә урын таба алмайынса, эскелек ойоштороп ебәрәләр. «Сельхозтехника»ның дөйөм ятағында телевизор, радио, газета һәм журналдар юҡ, бүлмәләрҙә бысраҡ, ҡайҙа ҡарама—тәмәке төпсөгө. Эшселәрҙе туҡландырыуҙы ла яҡшыраҡ ойоштороу талап ителә.

«Сельхозтехника»ның район берекмәһе етәкселеге ғинуарҙа техника ремонтлау буйынса билдәләнгән задание үтәләсәк, йәғни 10 трактор, 5 комбайн төҙәтеләсәк, тип ышандыра. Ләкин нindәй көс менән? Әгәр хәҙерге кеүек эшләгәндә, уңышҡа өлгәшеү һис тә мөмкин түгел. Ә ремонт сифатына гарантия ҡайҙа һуң? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап аныҡ һәм тәүәл булырға тейеш.

Рейдҙа ҡатнаштылар.

Н. ПОПОВ,
«Сельхозтехника» район берекмәһенең халыҡ контроле группаһы председателе.

В. АБДУЛЛИН,
район халыҡ контроле комитетының штаттан тыш бүлеге мөдире

Ф. МӨХӘМӘТОВ,
редакция сотрудникы.

КПСС РАЙКОМЫНДА, РАЙСОВЕТ БАШҠАРМА КОМИТЕТЫНДА, ПРОФСОЮЗ РАЙКОМЫНДА ҺӘМ ВЛКСМ РАЙКОМЫНДА

Юғары сифатлы һөт өсөн—вымпел

Райондың колхоз-совхоздары һөтсөлөк фермалары коллективтарының 1982 йылғы социалистик ярышы йомғаҡтарын ҡарап сығып, КПСС райкомы бюроһы, халыҡ депутаттарының район Советы башҡарма комитеты, ауыл хужалығы работниктары профсоюзы райкомы президиумы һәм ВЛКСМ райкомы бюроһы **Ленин орденлы Матрай совхозының Үҙәк бүлексәһе һөтсөлөк фермаһы коллективын** (бригадиры Л. В. Иванов) социалистик ярышта еңеүсе тип тапты һәм уға «Юғары сифатлы һөт өсөн» тигән вымпел тапшырҙы. Коллектив дәүләткә һөттөң 93,3 процентын беренсе сорт менән һатҡан, ул «Хеҙмәт байрағы» район газетаһындағы Почет таҡтаһына индерелде.

Ленин орденлы Матрай совхозының Новопетровка һәм Һарыҡүл һөтсөлөк фермалары һәм Таналыҡ совхозының бөтә фермалары коллективтарының да юғары сифатлы һөт һатыу буйынса яҡшы эше билдәләп үтелде.

Маҡан совхозы, «Красный доброволец» колхозы, Аҡъяр совхозының Быҙаулыҡ бүлексәһе һөтсөлөк фермалары коллективтарының һөттөң сифатын күтәреү буйынса насар эше билдәләнде.

Партия, профсоюз, комсомол ойошмаларына, хужалыҡ етәкселәренә, ауыл хужалығы белгестәренә малсылыҡ эшсәндәре араһында һөттөң сифатын күтәреү өсөн социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдереү бурысы йөкмәтелде.

Экономика экономиялы булырға тейеш

1982 ЙЫЛДА ДӘҮЛӘТКӘ ҺАТЫЛҒАН ҺӨТТӨҢ СИФАТЫ

Хужалыҡтар һәм фермалар	Һатылған (ц.) физик ауырлыҡ	Һатылған (ц.) зачет ауырлыҡ	Ҡуйылыҡ %-за	Сортлылыҡ %-за I	II	сортһыҙ
Колхоздар:						
Фрунзе исем.	**39**	**33**	**3,13**	**—**	**100,0**	**—**
Новый путь	**9349**	**9315**	**3,68**	**93,0**	**6,9**	**0,1**
Яңы Ерғән	4883	4847	3,67	93,0	6,9	0,1
Иләс	4466	4468	3,70	93,0	6,0	1,0
Кр. доброволец	**11486**	**11495**	**3,70**	**69,0**	**28,0**	**3,0**
Калинин исем.	**6382**	**6365**	**3,69**	**77,0**	**20,0**	**3,0**
Красное знамя	**10870**	**10728**	**3,65**	**79,0**	**17,0**	**4,0**
Атинган	4973	4843	3,60	81,0	15,0	4,0
Йәнтеш	5897	5885	3,69	78,0	18,0	4,0
Ленин исем.	**14306**	**14713**	**3,80**	**86,0**	**11,0**	**3,0**
Ивановка	7834	8185	3,84	87,0	11,0	2,0
Михайловка	838	885	3,91	84,0	10,0	6,0
Пугачевка	2892	2918	3,73	83,0	14,0	3,0
Аҡташ	2742	2775	3,74	89,0	9,0	2,0
Һаҡмар	**1560**	**1522**	**3,60**	**17,0**	**63,0**	**20,0**
Салауат исем.	**1210**	**1245**	**3,80**	**27,0**	**64,0**	**9,0**
Совхоздар:						
Аҡъяр	**18680**	**18578**	**3,88**	**77,0**	**20,0**	**3,0**
Үҙәк	4652	4641	3,69	79,0	17,0	4,0
Яковлевка	5177	5147	3,68	74,0	20,0	6,0
Быҙаулыҡ	5300	5231	3,65	73,0	24,0	3,0
Хворостянка	3551	3559	3,71	83,0	16,0	1,0
Таналыҡ	**27528**	**27149**	**3,65**	**81,0**	**17,0**	**2,0**
Подольск	8146	8183	3,72	84,0	15,0	1,0
Бакаловка	6976	6801	3,61	76,0	23,0	1,0
Әҙел	1871	1855	3,67	76,0	23,0	1,0
Савельевка	3587	3489	3,60	85,0	13,0	2,0
Таштуғай	3489	3454	3,66	81,0	15,0	4,0
Новоукраинка	3459	3367	3,60	83,0	15,0	2,0
Хәйбулла	**15138**	**14991**	**3,66**	**80,0**	**17,0**	**3,0**
Үҙәк	9406	9399	3,70	80,0	16,0	4,0
Хоҙайбирҙин	4430	4299	3,59	80,0	18,0	2,0
Бәлит	1302	1293	3,67	76,0	20,0	4,0
Маҡан	**8559**	**8524**	**3,56**	**72,0**	**27,0**	**1,0**
Нововоздвиженка	270	232	3,18	—	100,0	—
Мамбәт	6448	6447	3,70	74,0	25,0	1,0
Сәғит	1841	1845	3,71	75,0	24,0	1,0
Матрай	**27682**	**27762**	**3,71**	**93,0**	**6,9**	**0,1**
Үҙәк	9836	9860	3,71	93,3	6,6	0,1
Новопетровка	8344	8301	3,68	93,2	6,8	—
Һарыҡүл	9502	9601	3,74	92,5	7,4	0,1
Степной	**8614**	**8520**	**3,66**	**80,0**	**19,0**	**1,0**
Район б-са:	**161403**	**160940**	**3,69**	**81,0**	**17,0**	**2,0**

1982 йылда райондың колхоздары һәм совхоздары тарафынан һатылған һөттөң сифаты 1981 йыл менән сағыштырғанда бер аҙға яҡшырҙы. Һөттөң ҡуйылығы 0,02 процентҡа артты. 1981 йылда беренсе сортлы һөт 73 процент тапшырылһа, былтыр ул 81 процентҡа етте.

Ленин орденлы Матрай совхозының һөтсөлөк фермалары эшсәндәре һөттөң сифаты буйынса иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәште. Бында тотош совхоз буйынса һөттөң ҡуйылығы йылына 3,71 процент тәшкил итте һәм совхоз планды үтәү иҫәбенә 80 центнер һөт өҫтәп яҙылды.

Һөттөң сифаты өсөн күсмә вымпел йыл һөҙөмтәләре буйынса Ленин орденлы Матрай совхозының Үҙәк бүлексәһе һөтсөлөк фермаһы коллективына бирелә. Был коллектив һөттөң 93,3 процентын—беренсе һәм 6,6 процентын икенсе сорт менән тапшырҙы.

1982 йылда иң түбән сифатлы һөт «Красный доброволец» колхозының Әбүбәкир фермаһында булды. Был ферма һөттөң 69 процентын ғына беренсе сорт менән тапшырҙы, ә ҡалғанын икенсе сорт менән һәм сортһыҙ килеш оҙатты.

КПСС-тың XXVI съезы ҡарарҙарын — тормошҡа!

СССР төҙөлөүҙең 60 йыллығын лайыҡлы ҡаршылау буйынса Бөтә Союз социалистик ярышына ҡушылып, Аҡъяр совхозы коллективы 1982 йылда план заданиеларын һәм юбилей йылына ҡабул ителгән йөкләмәләрен үтәү буйынса байтаҡ көс һалды.

Совхоз игенселәре былтырғы ауыр һауа шарттарында иген культураларының һәр гектарынан 14,9-ар центнер иген үҫтереп алды, уртаса район күрһәткесенән 0,4 центнерға юғары. Үткән йылдарҙағы кеүек, беҙҙең совхоз район хужалыҡтары араһында иң күп—166 мең центнер—иген тапшырҙы һәм КПСС райкомы һәм райсовет башҡарма комитеты тарафынан билдәләнгән күләмле заданиены үтәп сыҡты.

Яковлевка бүлексәһенең 2-се урып йыйыу-транспорт комплексы коллективы (начальнигы Н. А. Рубцов) район буйынса һәр комбайнға иң юғары етештереүсәнлеккә өлгәште, һәм ул КПСС райкомының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән наградланды. Комбайн-транспорт звенолары араһында коммунист Н. А. Агаповтың звеноһы беренсе урынды яуланы, ул үҙе «Урак-82» чемпионы булды.

Ләкин былтыр дәүләткә иген тапшырыу планын үтәй алманыҡ: планға ҡарата 44 мең центнер иген биреп еткермәнек. Беҙ төп сәбәпте уңдырышлылыҡтың төрлө булыуында күрәбеҙ. Мәҫәлән, бишенсе һәм алтынсы бүлексәләрҙә ул һәр гектарҙан 12—13 центнерҙан артманы, ә икенсе бүлексәлә 20-шәр центнер иген йыйып алынды. Был һауа шарттары һөҙөмтәһе генә түгел, бында бүлексәләр менән етәкселек итеүҙең төрлө кимәле, кадрҙар менән тейешенсә тәьмин ителмәү һәм башҡалар кире йоғонто яһай.

Һөт, ит һәм йөн етештереүҙе һәм һатыуҙы арттырыу йәһәтенән ҡайһы бер алға китеш бар. Бөтә төр һыйыр малдары һаны артты, һыйырҙар һаны тулыландырыла. 1982 йылғы планда ҡаралған 16 мең урынына дәүләткә 19 мең центнерҙан ашыу һөт һаттыҡ. Беҙҙең һөтсөлөк фермалары районның һөтсөлөк фермалары араһындағы социалистик ярышта күп тапҡырҙар еңеп сыҡты. Ә Үҙәк бүлексә фермаһы коллективы (бригадиры Р. И. Ғөмәров) КПСС райкомы бюроһы һәм райсовет башҡарма комитеты ҡарары менән СССР төҙөлөүҙең 60 йыллығы хөрмәтенә йәйелдерелгән социалистик ярышта еңеүсе тип табылды һәм уға мәңгелеккә вымпел тапшырылды.

Беҙ дәүләткә һөт һатыу буйынса йыллыҡ планды үтәһәк тә биш йыллыҡтың тәүге ике йылы планы үтәлмәй ҡалды — йөҙ центнер самаһы һатып еткерелмәне. Бында совхоздың Хворостянка бүлексәһе малсыларының ғәйебе ҙур, унда бер йылда һәр һыйырҙан һауым 2000 килограмдан бер аҙға ғына артығыраҡ тәшкил итте. Әгәр был ферма һауымды уртаса совхоз кимәленә еткергән булһа, дәүләт өҫтәмә рәүештә 900 центнерға яҡын һөт алыр һәм ике йыллыҡ план байтаҡҡа арттырып үтәлер ине.

Алда ҙур бурыстар тора

Совхоз малсылары дәүләткә ит һатыу планын тултырҙы, 6048 центнер ит тапшырылды, ул 104,6 процент тәшкил итә.

Әммә ит етештереү һәм һатыу пландарын үтәүҙә ҡыйынлыҡтар ҙа булды, әлбиттә. Улар нигеҙҙә йәш һыйыр малдарының тәүлегенә уртаса артымының түбән булыуы һәм сусҡасылыҡта эштең насарая төшөүе арҡаһында килеп тыуҙы. Сусҡалар һаны әҙәйгәйне. Хәҙерге ваҡытта күрелгән саралар һөҙөмтәһендә уларҙың һаны тулыландырылды һәм 2400 башҡа еткерелде. Ләкин ҡатнаш аҙыҡҡа ҡытлыҡ кисерәбеҙ әле.

1982 йылда дәүләткә йөн һатыу планы 88 процентҡа ғына үтәлеүгә ҡарамаҫтан, биш йыллыҡтың тәүге йылы менән сағыштырғанда 101 центнерға артты. Дөрөҫ, һарыҡтар һаны хәҙер байтаҡҡа күберәк, әммә инә малдар һаны һаман аяҡҡа баҫтырылмаған, 7 мең һарыҡтың 1,5 мең самаһы ғына инә һарыҡ. Беҙгә совхоздың һарыҡ көтөүе структураһындағы бындай нормаль булмаған күренеште төҙәтергә һәм, 2 мең тирәһе тоҡом һарығы һатып алып, уны зоотехния нормаларына етештерергә кәрәк.

Совхозда һарыҡсылыҡты алып барыуҙа ҙур ғына етешһеҙлектәр бар, әлбиттә. Был иң элек—малдарҙың күпләп үлеүенә юл ҡуйыуҙа, һәр 100 һарыҡтан кәм үрсем алыуҙа. Ләкин малсылыҡтың был тармағындағы эштәрҙе яҡшыртыу өсөн билдәле бер эш башҡарылды һәм башҡарыла. Етерлек күләмдә бесән бар. Һарыҡ аҙбарына капиталь ремонт үткәрелде, бәрәсле һарыҡтар өсөн йылытылған урын киңәйтелде. Икенсе бер яңы аҙбарҙың иҙәндәре лә электр менән йылытылды. Бөтә был саралар малсылыҡ эшенә талапсанлыҡты күтәреү һәм контролде көсәйтеү менән бергә беҙҙең хужалыҡтың һарыҡсылығындағы эштең торошон яҡшыртырға ярҙам итер, тип ышанабыҙ.

Производствоның эффектлылығын һәм тотороҡлоғон күтәреүгә өлгәшеү өсөн совхоздың материаль-техник базаһын даими яҡшыртырға, бөтә тармаҡтарҙы ла юғары квалификациялы кадрҙар менән комплектларға һәм улар өсөн тейешле шарттар тыуҙырырға кәрәк. Был тәңгәлдә хужалыҡта һуңғы ваҡытта билдәле бер эш башҡарылды. Мәҫәлән, былтыр ике һыйыр аҙбары, минераль ашламалар өсөн склад, силос, сенаж һәм ҡатнаш силос өсөн йөҙләнгән өс траншея төҙөлдө, һуғарыу участкалары реконструкцияланды һәм киңәйтелде, хәҙер ҡатнаш аҙыҡ цехы монтажлана.

Былтыр шулай уҡ торлаҡ һәм культура-көнкүреш төҙөлөшөнә лә ҙур иғтибар бирелде. 292-се ПМК төҙөүселәре тарафынан бына тигән 140 урынлы балалар баҡсаһы һалынды, хужалыҡ ысулы менән ике квартиралы 12 һәм бер квартиралы бер йорт төҙөү тамамланып килә.

Совхоз байтаҡ йорт төҙөй. 1982 йылғы тәүге төҙөлөш планы 2,5 тапҡырҙан күберәккә арттырып үтәлде. Әммә производство объекттары, бигерәк тә торлаҡ йорттарға һәм культура объекттарына мохтажлыҡ ҙур. 30-сы йылдарҙа уҡ төҙөлгән Үҙәк ремонт мастерскойы хәҙер яңы машиналарҙы, бигерәк тә К-700 тракторҙарын ремонтлау талаптарын ҡәнәғәтләндерә алмай. Самар урта һәм Быҙаулыҡ һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре үтә насар хәлдә. Юлбарыҫ, Самар һәм Хворостянка ауылдарындағы клубтар бөгөнгө көн талаптарына яуап бирмәй. Иң мөһиме—торлаҡ йорттар етешмәй. Быҙаулыҡта 30-сы йылдарҙан бирле ике барак һаҡланып ҡалған, һәм кешеләр ошоғо тиклем шунда йәшәргә мәжбүр булалар. Хәл ителмәгән башҡа проблемалар ҙа күп әле.

Ун беренсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылына аяҡ баҫып, беҙҙең коллектив был көндәрҙә яңы ниәттәр менән йәшәй, партия һәм хөкүмәт тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа яңы рубеждар билдәләй. Совхоз эшсәндәре КПСС-тың XXVI съезында билдәләнгән илебеҙҙең экономик ҡеүәтен, совет кешеләренең материаль тормош хәлен һәм культура кимәлен күтәреү буйынса сараларҙы әҙмә-эҙ тормошҡа ашырасаҡтарына ныҡлы ышана.

З. ИСҠУЖИН,

Аҡъяр совхозы директоры, райсовет депутаты.

ТЕХНИКАНЫ—ӘҘЕРЛЕК ҺЫҘЫҒЫНА

Яҙ ҡаты һорау аласаҡ

Һәр ауыл хужалығы кампанияһы игенселәр өсөн яуаплы имтихан булып тора. Хәҙерге көндә ауыл хужалығы техникаһын яҙғы баҫыу эштәренә әҙерләү тулы ҡеүәт менән бара.

Мәҫәлән, үткән йылдың дүртенсе кварталында пландағы 26 урынына 30 трактор ремонтланды. Ремонт эштәре быйыл да яҡшы бара, 1 К-700, тәгәрмәсле ике һәм гусеницалы дүрт трактор төҙәтелде лә инде. Ошо көндәрҙә мастерскойҙан гусеницалы тағы дүрт трактор ремонтланып сығасаҡ.

Коммунист-моторист А. Ф. Соловьев, газоэлектросварщик Рәфҡәт Таһиров, токарь Р. С. Ҡәнпов, яғыулыҡ аппаратураларын көйләү буйынса слесарь В. Д. Марущак трактор ремонтлауҙа тырышып эшләйҙәр. Улар көндәлек сменә нормаһын 150—160 процентҡа үтәй.

Иген комбайндарын ремонтлау һүлпәнерәк бара, план үтәлмәй инде. Әммә хужалыҡ етәкселәре етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса тейешле саралар күрҙе. Хәҙер эш яйға һалына башланы.

Б. ҒӘББӘСОВ,

Маҡан совхозының баш инженеры вазифаһын башҡарыусы.

ТАНАЛЫҠ совхозы Таштуғай һауым гуртының мал ҡараусыһы, коммунистик хеҙмәт ударнигы Рафиҡ Үтәшев малсылыҡта 1958 йылдан алып эшләй. Ун беренсе биш йыллыҡтың икенсе йылы йомғаҡтары буйынса ул «Райондың 1982 йылғы чемпионы» тигән Диплом менән наградланды.

ҺҮРӘТТӘ: Р. Үтәшев.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Хеҙмәт кешене матурлай

Таныш һуҡмаҡтан

Ауыл таң алды ҡараңғылығына солғанған. Күктәге йондоҙҙар күңелле йымылдайҙар. Ә ҡайһы бер өйҙәрҙең тәҙрәләренән яҡтылыҡ сағыла. Һыйырҙарҙың мөңрәүе, әтәс тауыштары ишетелә. Мейес торбаларынан төтөн күтәрелә.

Таңһылыу Мәмбәтова өйөнән сыға һәм ашығып малсылыҡ фермаһы яғына йүнәлә.

Таңһылыу иң тәүҙә малдарға бер тигеҙ итеп аҙыҡ тарата, ҡулына ҡырғыс алып иҙәндәге тиҙәкте таҙарта, һуңынан һыйырҙарҙың елендәрен йыуып иртәнге һауынды башлай.

Маҡан совхозының Мәмбәт бүлексәһендә эшләгән алдынғы һауынсыларҙың береһе Т. Ш. Мәмбәтованың хеҙмәттәге эш көнө бына шулай башланды.

Хужалыҡта уның тураһында төрлө һүҙҙәр ишетергә мөмкин. Һөйләшкән ваҡытта уны гәзиттә «кәңәшсе-тәрбиәсе», «ударник», «бер-нисә тапҡыр совхоз чемпионы» тигән һүҙҙәр менән характерлайҙар.

Таңһылыу Мәмбәтова бындай хөрмәтте үҙенең намыҫлы, ныҡышмалы хеҙмәте, машина менән һыйыр һауыу операторҙарына һәм йәш мал ҡараусыларға изге кәңәштәре һәм ярҙамы менән яуланы.

Ул 25 йылдан ашыу малсылыҡта эшләй һәм ошо ваҡыттың күп өлөшөн һауынсы һөнәрендә, тапшырылған эште намыҫлы башҡара, малсы тигән юғары исемгә тап төшөрмәй. Таңһылыу малсылар коллективына йәшләй генә килде. Хәҙер ул йылмайып: «Бөтә иптәштәрем дә фермаға килде, һәммен дә уларҙан ҡалырға теләмәнем»,—тип хәтерләй.

Ҡыҙға тәүҙә быҙауҙар төркөмөн беркеттеләр. Эшләй аласағына ышандылар. Тәүге көндәрҙән үк ул малсылар араһында үҙ кешегә әйләнде, тәжрибәлеләрҙән ныҡышмалы рәүештә өйрәнде.

Был эш ҙур тырышлыҡ талап итә. Йәш малдарҙы Таңһылыу бөлөп тәрбиәләүе—дөрөҫ ашатыу һәм тәрбиәләү, һөҙөмтәһендә быҙауҙарҙың йөҙ процент килеш һаҡланыуына өлгәште.

Һыйырҙар төркөмөн ышанып тапшырған көн Таңһылыу өсөн иң шатлыҡлы көндәренең береһе булды. Һауынсы хеҙмәте ул саҡта бик ауыр ине. Сөнки ҡул менән һауҙылар. Ләкин эш көндән-көн ҡыҙыҡлыраҡ була барҙы. Таңһылыу фермаһыҙ, көндә осрашырға тура килгән шатлыҡтар һәм уңышһыҙлыҡтарҙан тыш үҙ тормошон күҙ алдына ла килтерә алмауы тураһында бер нисә тапҡыр һығымтаға килде.

—Хәҙер эш күпкә еңеләйҙе. Механизация ярҙамға килде, төркөмдәге һыйырҙар ҙа яҡшы,—тип һөйләй Т. Мәмбәтова.—Шулай ҙа һауынсы һөнәре ҙур көс талап иткән хеҙмәттәрҙең береһе булып ҡала килә.

Ә бит өй эштәрен дә өлгөрөргә, балаларҙы ҡарарға ла кәрәк. Шуны әйтергә кәрәк, Мәмбәтовтар ғаиләһе тураһында ауылда тик йылы һәм маҡтау һүҙҙәре генә ишетергә мөмкин. Ире Рәфҡәт егерме йылдан ашыу механизатор булып эшләй, кукуруз үҫтерә, йыл һайын юғары хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәшә һәм бүлексәнең кукуруз үҫтереүселәре араһындағы социалистик ярышта

еңеүсе булып сыға.

Таңһылыу Мәмбәтова юғары хеҙмәт күрһәткестәре өсөн бер нисә тапҡыр дирекция, совхоздың партия һәм профсоюз комитеттарының Почет грамоталары, «Коммунистик хеҙмәт ударнигы», «Социалистик ярышта еңеүсе», «Унынсы биш йыллыҡ ударнигы» знактары, «Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн. В. И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы» миҙалы һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл байраҡ ордены менән наградланды. Ул Маҡан ауыл Советы депутаты.

Т. Ш. Мәмбәтова бишйыллыҡтың икенсе йылында ҙур уңыштарға өлгәште. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 65 йыллығына һауым буйынса биш йыллыҡтың ике йыллыҡ планын, ә СССР төҙөлөүҙең 60 йыллығына биш йыллыҡтың икенсе йылына ҡабул ителгән социалистик йөкләмәләрен үтәне. Һауым буйынса совхоз һауынсылары араһында беренселекте алды.

Хужалыҡтың алдынғы һауынсыһы, КПСС Үҙәк Комитетының ноябрь (1982 йыл) Пленумы ҡарарҙарына аныҡ эштәр менән яуап биреп, илдең Аҙыҡ-түлек программаһына лайыҡлы өлөш индереп һәм йәмәғәт малын уңышлы ҡышлатыу буйынса социалистик ярыш инициаторҙары Таналыҡ совхозы малсыларының башлангысын хуплап, биш йыллыҡтың өсөнсө йылында тағы ла юғарыраҡ күрһәткестәргә өлгәшергә ҡарар итте.

У. ИЛЕМБӘТОВ.

ҺҮРӘТТӘ: Т. Мәмбәтова.

В. УСМАНОВ фотоһы.

ҺЕҘҘЕҢ ЙОРТ ҺӘМ УСАДЬБА ЯНЫ ХУЖАЛЫҒЫ

Һыйырҙың һөтө—телендә

Мал аҙығын әҙерләп ашатыу уларҙың туҡлыҡлылыҡ сифаттарын яҡшырта, малдар уны яратып ашай.

Һаламды ваҡлайҙар һәм тоҙло һыу менән сылаталар (10 литр һыу, 10 килограмм һалам, 200 грамм тоҙ), силос менән ҡатнаштыралар. Туралған һаламды төпрә менән дә сылатырға мөмкин. Һаламды бешекләүе тағы ла яҡшыраҡ. 1 литр һыуға 1 килограмм иҫәбенән сылатылған һаламды парлағысҡа (ҡапҡаслы теләһә ниндәй һауыт) һалалар. Аҙыҡты 3—4 сәғәт ябыҡ парлағыста тоталар.

Һаламды кальцинациялауҙы ла ойошторорға ауыр түгел. 10 килограмм һаламға 300 грамм иҙелмәгән әҙбиз йәки 900 грамм әҙбиз иҙмәһе алалар һәм 20—25 литр һыуҙа иҙәләр. Туралған һаламды иретмәлә 5—10 минут тотҡандан һуң таҡтаға йәйеп һалалар һәм иретмә ултыртылған һауытҡа ағып бөткәнсе шунда тоталар. Унан һуң был иретмә менән һаламды тағы ла сылаталар. Эшкәртелгән һаламды бер тәүлек тотҡандан һуң ғына малға бирәләр.

Тамыр аҙыҡтарҙы, шулай уҡ иҫәптән картуфты, яҡшы йыуып, сей һәм ваҡланмаған килеш ашаталар. Уларҙы малдарға ас көйөнсә бирмәйҙәр. Тамыр аҙыҡтарҙы быҙауҙарға ғына ваҡлап бирәләр. Уларҙы малға ашатыр алдынан ғына турайҙар.

Яҙға табан үткән йылғы картуфты ашатҡанда бик һаҡ булырға кәрәк. Был ваҡытҡа картуф үҫә башлай, бүлбеләрендә, бигерәк тә шытымдарында, ағыулы матдә—соланин туплана. Бындай картуфты малдарға бары тик бешереп, һыуын түгеп ашаталар. Быҙауҙарға бындай аҙыҡты бирмәү яҡшыраҡ.

Ҡыш көнө ағастарҙың йәш үренделәрен тупаҫ аҙыҡ итеп ҡулланырға мөмкин. 8—10 миллиметр йыуанлығындағы ботаҡтарҙы ваҡ итеп тураҡлайҙар һәм онтайҙар. Малдар япраҡ аҙығын яҡшы ашаһын өсөн уны парландыралар, концентраттар, тамыр аҙыҡтар, башҡа аҙыҡтар менән тәмләндерәләр. Уны рационға аҙлап индерергә кәрәк.

Ылыҫ оно әҙерләү өсөн ылыҫлы ағастарҙың бөтә төрҙәре лә яраҡлы. Ҡырҡылған урында ботаҡтарҙың йыуанлығы 3 миллиметрҙан ашыу булмаҫҡа тейеш. Ботаҡтарҙы гәзиттәге сапҡыс менән тураҡлайҙар һәм ит үткәргес аша үткәрәләр. Һуңынан был массаны киптерергә, тарттырырға йәки сүкеш менән онтарға кәрәк. Ваҡланған ылыҫ онон иләк аша үткәрәләр һәм башҡа аҙыҡтар менән ҡушып ашаталар. Ләкин һыйырҙарға 500 грамдан, ә йәш тана-торполарға 200 грамдан артыҡ бирергә ярамай. Уны 3—4 аҙна ашатҡандан һуң 7—10 көнгә туҡтатып торорға кәрәк.

А. ИВАШУРА,
ветеринария фәндәре кандидаты.

Белорус ССР-ы. Могилев районының Володарский исемендәге колхозында ауыл төҙөүселәре бер юлы тотош урамды файҙаланыуға тапшырҙы. Һәр йорт усадьба тибында, бер ғаиләгә иҫәпләнгән, йөҙ квадрат метр майҙанды биләй, коммуналь яҡтан бөтә уңайлыҡтары бар. Ишек алдында—һарай, баҙ, мал һәм ҡош-ҡорт аҫырау өсөн аҙбарҙар.

Йыйылмалы керамзит-бетон конструкциялар сығарыуҙы арттырыу өсөн Могилевтың «Облмежколхозстрой» берекмәһе үҙенең өс предприятиеһының көсөн бергә туплаған, өҫтәмә производство майҙаны һәм төҙөлөш материалдары тапҡан. Шуның һөҙөмтәһендә 1982 йылғы заданиенан тыш ауылдарҙа өҫтәмә рәүештә 260 йорт һалынған. Быйыл яңы поселоктар төҙөү ике тапҡырға артасаҡ.

ҺҮРӘТТӘ: Володарский исемендәге колхоз поселогының яңы урамы. **(ТАСС фотохроникаһы).**

Иптәштәр судтарында

Тейешле язаһын алдылар

Ошо көндәрҙә «Красный доброволец» колхозының Әбүбәкир ауылында иптәштәр суды ултырышы булды, унда Хәниф Фәхретдиновтың эше ҡаралды. Ул, мал ҡараусы булып эшләп, даими рәүештә эскелек һәм мал аҙығы урлау менән шөғөлләнә, оятһыҙ рәүештә ферманан шәхси малы өсөн бесән һәм силос алып ҡайта. Бер нисә тапҡыр иҫкәртелеүгә ҡарамаҫтан, ул һаман аҙыҡ ташыуын һәм эшкә эсеп килеүен дауам итә. Һуңғыһында хатта бер йөк силосты өйөнә алып ҡайта.

Судта Х. Фәхретдинов мал аҙығы урлауын ғәйепләүҙе һәм иптәштәр судынан ғәфү итеүҙәрен үтенде, башҡаса эсмәҫкә һәм урлашмаҫҡа һүҙ бирҙе. Суд мал аҙығы урлағаны һәм эшкә эсеп килгәне өсөн Х. Фәхретдиновҡа 30 һум күләмендә штраф һалды һәм колхоз идараһына 1982 йыл йомғаҡтары буйынса премиянан мәхрүм итергә тәҡдим итте.

Ә һауынсы Миңлебикә Юлдыбаева, насарлыҡ эшләүен белә торған, һауымды арттырыу маҡсатында һөткә һыу өҫтәй. Был эше менән күҙ буйыу шөғөлләнә, иҫкәртелеүенә ҡарамаҫтан, М. Юлдыбаева үҙенең ҡырын эшен һаман дауам итә. Иптәштәр суды уға ла 30 һум күләмендә штраф һалырға ҡарар итте һәм колхоз идараһына 1982 йыл өсөн премиянан өлөшләтә мәхрүм итергә тәҡдим индерҙе.

Ошо уҡ ултырышта үҙенә беркетелгән һыйырҙарҙан урлап, шәхси һыйырына аҙыҡ ташыу менән шөғөлләнгән һауынсы Орҡоя Акилованың да эше тикшерелде. Был эше өсөн иптәштәр суды О. Акиловаға аҡсалата штраф һалырға ҡарар итте.

Н. БУДАРИН,
иптәштәр суды председателе.

Сит илдәрҙә

ЛАГОС. Нигерия һәм Швеция КАР властарының Африка ҡитғаһындағы һәм бөтә донъялағы тыныслыҡҡа, именлеккә ҙур ҡурҡыныс янаусы апартеид политикаһын ғәйепләй, тиелә берлектәге Нигерия-Швеция коммюникеһында. Был коммюникеға Швеция премьер-министры У. Пальме һәм Нигерияның вице-президенты А. Эквуэме ҡул ҡуйҙы. Уға бында Швеция премьер-министрының рәсми визиты тамамланғас ҡул ҡуйылды. Ике дәүләт, тиелә документта, апартеид ғәскәрҙәренең Көньяҡ Африканың күрше бойондороҡһоҙ дәүләттәренә даими баҫып инеүен ғәйепләй. **(ТАСС).**

ПЕРВОМАЙСК ҺИГЕҘ ЙЫЛЛЫҠ МӘКТӘБЕНДӘ

Уларҙан өлгө алабыҙ

Беҙ, Первомайск һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең 4-се класы уҡыусылары, вожатыйҙарыбыҙ Рәсимә Ғәбитова менән Миңлегөл Рәимова тураһында һөйләргә теләйбеҙ. Улар етенсе класта уҡый, тик яҡшыға ғына өлгәшәләр һәм һәр нәмәгә өлгерәләр. Уларҙың беҙҙең класҡа килеүен түҙемһеҙлек менән көтөп алабыҙ. Рәсимә һәм Миңлегөл апайҙар менән беҙгә һәр саҡ күңелле, сөнки бергәләшеп йырларға һәм бейергә өйрәнәбеҙ. Уҡыуҙан буш ваҡытта ла китаптар уҡыйбыҙ һәм уйнайбыҙ.

Беҙ Рәсимә һәм Миңлегөл менән ғорурланабыҙ һәм уларҙан өлгө алабыҙ.

4-се класс уҡыусылары.

Мәктәп тормошо

Мәктәп уҡыусылары илебеҙҙең 60 йыллыҡ юбилейын һәм 1983 йылды уҡыуҙағы һәм мәктәп тормошондағы һәйбәт күрһәткестәр менән ҡаршыланы. Бөтә совет кешеләре кеүек үк, беҙ ҙә СССР-ҙың данлы алтмыш йыллығын лайыҡлы ҡаршыларға әҙерләндек. Һәр пионер отряды материал йыйҙы, альбомдар әҙерләне, союздаш республикаларҙың бейеүҙәрен һәм йырҙарын өйрәнде.

Пионер сборҙарында агроном Г. С. Ильясов, алдынғы механизатор Ф. К. Ниғәмәтов, граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ф. С. Кинйәбаев менән осрашыуҙар бигерәк тә иҫтәлекле булды.

Былтыр йәй бер төркөм уҡыусылар герой ҡала Волгоградҡа барҙы, унда улар Мамаев ҡурғанында, планетарийҙа, музейҙарҙа булдылар. КПСС-тың XXII съезы исемендәге Волжск ГЭС-ының теҙәләү айҡанлы ҡалҡып сыҡҡан йәш Волжский ҡалаһы менән танышты.

Тыныслыҡ өсөн хәрәкәттә ҡатнашып, беҙ немец теле уң көнләгән үткәреү осоронда теләктәшлек баҙарын ойоштороҙоҡ, һәм унда йыйылған аҡсаларҙы Тыныслыҡ фондына күсерҙек.

«Рус теле һәм СССР халыҡтарының дуҫлығы» темаһы буйынса рус теле һәм әҙәбиәте уң көнләгән үткәреү көндәрендә бигерәк тә актив эшләнек. «Ватаныбыҙ беҙҙең бөйөк» тигән һүрәттәргә күргәҙмә ойоштороҙоҡ.

Уҙған йылдың декабре башында беҙ «Балыҡтарҙы ҡотҡарығыҙ» тигән операция үткәрҙек. Әҙ һыулы быуанан Таналыҡ йылғаһына күнәклап ташып, меңләгән балыҡты ҡотҡарҙыҡ. Макулатура йыйып тапшырыуҙа ҡатнаштыҡ, спорт ярыштары, класс мебелен, дәреслектәрҙе ремонтлау буйынса операция үткәрҙек. Ә ҡышҡы каникулда Сибай ҡалаһына экскурсия яһаныҡ. Ҡаланың үткәне һәм хәҙергеһе менән таныштыҡ.

Ф. НИҒӘМӘТЙӘНОВА,
М. ХӘБИБУЛЛИНА,
Р. ИҪӘНГИЛДИНА.

Халыҡ ижадына арналды

Юлбарыҫ һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә башҡорт халыҡ ижадына арналған кисә булды. Уға һәр класс алдан әҙерләнде: башҡорт әкиәттәре сәхнәләштерелде, стена газеталары сығарылды. Ә һүрәт төшөрөргә яратыусылар әкиәттәр буйынса һүрәттәр әҙерләне. Ҡунаҡҡа үҙҙәренең өләсәйҙәрен саҡырҙылар.

Кисә үткәреләсәк класта «Әкиәттәр донъяһында» тигән темаға һүрәттәр стенды, иҫке әйберҙәр һәм милли кейемдәр күргәҙмәһе ойошторолдо.

Балалар һәм ҡунаҡтар мәктәпкә байрамса кәйеф менән йыйылды. Кисәне рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы А. И. Ҡасимова асты. Ул халыҡ ижады тураһында һөйләне. Һуңынан әкиәттәр буйынса викторина үткәрелде. Миңлегөл, Вилә, Гөлнара һәм Таһир Байғужиндар, Вәсилә Бағышаева, Урал Таймасовтар иң отҡорҙар булып сыҡты.

Балалар башҡорт халыҡ йырҙары һәм әкиәттәр яҙылған пластинкаларҙы ҙур иғтибар менән тыңланы.

Һәм бына сәхнәгә дүртенсе класс уҡыусылары сыға. Улар «Алтын тамсы» әкиәтен сәхнәләштерҙе. Һуңынан башҡа кластар ҙа «Яңғыҙ төлкө», «Шалҡан», «Ни өсөн ҡуяндың ҡойроғо ҡыҫҡа» тигән әкиәттәрҙе күрһәтте. 6-сы һәм 7-се класс уҡыусылары үҙҙәренең ролдәрен оҫта башҡарҙы.

Балаларға ҡунаҡтарҙың—өләсәйҙәренең сығыштары бик оҡшаны. Улар башҡорт халыҡ йырҙарын һәм таҡмаҡтар башҡарҙы. Кисә һуңында ҡунаҡтарҙы тәмле сәй менән һыйланылар.

Дөйөм мәктәп линейкаһында йомғаҡ яһалды. 6, 4, 5 һәм 8-се класс уҡыусылары әкиәттәрҙе яҡшы сәхнәләштергәндәре өсөн призлы урындарҙы алды. Ә Рәйсә һәм Филзә Солтановалар, Илшат Бағышаев, Вилә Байғужиналар иң яҡшы һүрәт төшөрөүселәр тип табылды. Актив ҡатнашҡан уҡыусыларға призлар бирелде.

С. РЫҪҠОЛОВА,
мәктәптең профком председателе.

Беҙҙең фотохәбәрсебеҙ Вәхит Усмановтың һүрәтендә һеҙ күргән Гөлсирә Атанбаева Бүребай поселогының көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү йортонда эшләй. Ул еңел өҫ кейеме һәм баш кейемдәре буйынса дүртенсе разрядлы тегенсе. Дүрт йыл эшләү дәүерендә ул үҙ һөнәре нескәлектәренә тулыһынса өйрәнде. Гөлсирә үҙенең эш һөйәрлеге һәм әҙәплелеге менән коллективта абруй ҡаҙана. Уның эше тураһында халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеүҙең производство идаралығы етәкселәренән һәм клиенттарҙан тик маҡтау һүҙҙәре генә ишетергә мөмкин.

СПОРТ

ХОККЕЙСЫЛАР ЯРЫША

Район үҙәгендә 2-се һанлы Аҡъяр урта мәктәбенең хоккей майҙанында СССР-ҙың 60 йыллығына арналған шайбалы хоккей буйынса ярыштар булып үтте.

Боҙға беренсе булып район үҙәге һәм Маҡач совхозы хоккейсылары сыҡты. Тәүге минуттарҙа уҡ боҙ майҙансығы хужалары өҫтөнлөк алды һәм уйындың дүртенсе минутында Фарсат Нураев шайба индерә, ә унынсы минутта Мирзат Иштанов иҫәпте арттыра. Һуңынан Ф. Нураев ырғытҡан шайбаны С. Кулибаев дәғүәселәр ҡапҡаһына индерҙе.

Һөҙөмтәлә аҡъярҙар маҡандарҙы 12:1 иҫәбе менән еңде.

Һуңынан Бүребай һәм Подольск хоккейсылары осрашты. Тәүге минуттарҙан уҡ Таналыҡ совхозы хоккейсылары өҫтөнлөк алды. Уйын барышында Хәйҙәр Юзеев өс шайба индерҙе. Икенсе таймда Нурислам Манишев, Сергей Ясаев, В. Скалозуб, иҫәпте арттырҙы. Таналыҡ совхозы хоккейсылары 6:1 иҫәбе менән еңде.

Район үҙәге һәм Ленин орденлы Матрай совхозы хоккейсылары араһында көрәш ҡыҙыу барҙы. Тәүге шайбаны матрайҙар ҡапҡаһына Әмир Усманов индерҙе. Ә инде ун дүртенсе минутта матрайҙар иҫәпте тигеҙләй. Һуңғы осорҙа матрайҙар үҙҙәренең ныҡышмалыҡтарын күрһәтеп, уйын бөтөүгә биш минут ҡалғас тағы ла дүрт шайба индерәләр. 5:2 иҫәбе менән матрайҙар еңә.

Майҙанға Таналыҡ һәм Матрай совхозы командалары сыға. Был осрашыуҙа 3:2 иҫәбе менән Таналыҡ совхозы хоккейсылары еңеүсе була.

Һуңғы осрашыуҙа Таналыҡ совхозы командаһы район үҙәге командаһын 1:0 иҫәбе менән еңде.

Ярыш һөҙөмтәһендә район үҙәге, Таналыҡ һәм Матрай совхозы командалары алтышар очко йыйҙы. Беренсе урын Матрай совхозы хоккейсыларына, икенсе—Таналыҡ совхозына, өсөнсө—район үҙәге командаһына бирелде.

Аҡъярҙан Фәнил Баҡтыбаев иң яҡшы һаҡсы тип билдәләнде, иң яҡшы һөжүм итеүсе— Хәйҙәр Юзеев (Подольск), иң яҡшы ҡапҡасы—Дамир Рәхмәтов (Уфимск).

Г. ЛЕЖНЕВ,
ярыш судьяһы.

ҺҮРӘТТӘ: уйын ваҡыты.

В. УСМАНОВ фотоһы.

Бер юлы өс бүре

Анатолий Григорьевич Тяпкин бала саҡтан уҡ хайуандарҙы, үҫемлектәр донъяһын ярата, тәбиғәтте өйрәнә. Совет Армияһы сафында хеҙмәт иткәндән һуң Ырымбур ауыл хужалығы институтын тамамлай.

Ул районыбыҙҙың тәбиғәтен һаҡлау буйынса байтаҡ эшләй, һунарсылыҡ белгесе булып иҫәпләнә, 20 йылдан ашыу райондың һунарсылар йәмғиәте ағзаһы. Йәнлек тиреһе тапшырыу буйынса планын йыл һайын уңышлы үтәп килә һәм байтаҡ бүреләрҙе юҡ итә. Мәҫәлән, былтыр ул ике бүре атып алды.

Анатолий Григорьевич 1983 йылда ла һунарын уңышлы ғына башланы. Яңыраҡ ул «Буран» ҡар йөрөгөсө менән һунарға сыға һәм бүреләр өйөрөнә юлыға. Ләкин йыртҡыстар ян-яҡҡа ҡаса. Анатолий Григорьевич береһе артынан төшә. Атып ебәреүе була, бүре йығыла, тиҙҙән икенсеһе лә ауа. А. Г. Тяпкин өсөнсөһөн ҡыуа башлай һәм уныһын да атып йыға. Ә дүртенсеһе, яраланып, урманға инеп юғала. Шулай итеп, Анатолий Григорьевич бер һунарҙан өс бүре менән ҡайтты.

А. ПРИВАЛОВ.
Ивановка ауылы.

Редакторы Ш. М. БАЙҒУСҠАРОВ

Аҡъяр совхозы коллективы КПСС ағзаһы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы, пенсионер **МАШКИН Михаил Федоровичтың** үлеп ҡалыуы сәбәпле мәрхүмдең туғандары һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Бүребай руда идаралығының автотранспорт цехы коллективы ашлана бешереүсеһе Т. А. Харченконың ире **ХАРЧЕНКО Иван Максимовичтың** ваҡытһыҙ үлеп ҡалыуы сәбәпле уның һәм туғандары менән яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Редакцияның адресы: Аҡъяр ауылы, Сиҙәм проспекты, 37.

Телефондар: редактор—2-11-95, редактор урынбаҫары, яуаплы секретарь һәм ауыл хужалығы бүлеге—2-15-95, партбүлек—2-13-97, редактор урынбаҫары, тәржемәселәр—2-14-95, хаттар бүлеге һәм радиохәбәрсе—2-13-95, фотохәбәрсе—2-14-95, типография директоры—2-15-62, цех—2-14-87.

Орган Хайбуллинского райкома КПСС и районного Совета народных депутатов БАССР.

Газета аҙнаһына өс тапҡыр: шишәмбе, кесаҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт һәм рус телендә сыға.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Хәйбулла район типографияһы. Заказ № 141. Тираж 2350.